*Ринат КӘРИМОВ,*
*Ҡурған өлкәһенең Әлмән районы*
*халыҡ мәғарифы идаралығы мөдире*

# Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ

Илебеҙҙәге ыңғай үҙгәрештәр беҙҙең Ҡурған өлкәһендә лә үҙ емештәрен бирә. Һуңғы йылдарҙа был төбәктә йәшәгән башҡорттар өсөн үҙ телен, мәҙәниәтен, тарихын һәм әҙәбиәтен өйрәнеү йәһәтенән байтаҡ мөмкинлектәр асылды.

Әлеге көндә Әлмән районының 9 мәктәбендә — Тәңрекүл, Ҡаҙан, Юламан, Майлыҡ, Ҡаҙаҡкол, Подьесовский, Крутоложский, Шәрип мәктәптәрендә туған тел уҡытыла. Был башҡорт милләтенән булған уҡыусыларҙың 49,8 проценты тигән һүҙ. Мәктәптәр буйынса алғанда уҡыусыларҙың 38,1 проценты — 1330 кеше башҡорт, 28,7 проценты, йәғни 1000 уҡыусы татар милләтенән. 1999 йылда Мәғариф хеҙмәткәрҙәренең квалификацияһын күтәреү институты базаһында беренсе тапҡыр райондың биш уҡытыусыһы «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы» һөнәренә эйә булды. Был эштә беҙгә Өфө уҡытыусылары ҙур ярҙам күрһәтте. Шулай итеп, хәҙер райондың 5 мәктәбендә туған телде махсус белемле уҡытыусылар уҡыта. Юламан урта мәктәбендә 5-8-се кластарҙа факультатив рәүешендә Башҡортостан тарихы өйрәнелә, һәм был милләтебеҙ тарихын, мәҙәниәтен яҡындан белергә ярҙам итә. Тәңрекүл урта мәктәбендә лә Башҡортостан тарихын өйрәнеүгә ҙур иғтибар бирелә.

Район мәғариф идаралығы башҡорт теле һәм әҙәбиәте, Башҡортостан тарихы, мәҙәниәте буйынса уҡытыусылар әҙерләүгә ҙур иғтибар бирә. Әлбиттә, был эштә беҙгә Башҡортостан Республикаһы хөкүмәте, Мәғариф министрлығы ҙур ярҙам күрһәтә. Әлеге көндә Башҡортостандың юғары һәм урта махсус уҡыу йорттарында райондан 7 кеше уҡый, шуларҙың береһе — Фәүзиә Фәтҡуллина башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы буласаҡ.

Ғөмүмән, Башҡортостан менән тығыҙ бәйләнеш булдырылған. Беҙҙе даими рәүештә тел һәм әҙәбиәт буйынса семинарҙарға, олимпиадаларға, төрлө конкурстарға, әҙерлек курстарына саҡырып торалар. Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы дәреслектәр, нәфис әҙәбиәт менән дә ҙур ярҙам күрһәтә.

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, район мәктәптәрендә туған тел уҡытыла башланыуы байтаҡ етди проблемаларға осраны.

1. Туған тел, Башҡортостан тарихы буйынса белгестәрҙең тейешенсә тәьмин ителмәүе туған тел уҡытыу үҫешен тотҡарлай. Ошо арҡала Искәндәр, Асҡар башланғыс, Татар-Ивановский төп, Өскүл, Гузовский башланғыс мәктәптәрендә башҡорт теле өйрәнелмәй ҡала килә.

2. Туған тел уҡытыусыларының белемен күтәреү курстары ойошторолмай.

3. Беҙҙең райондың, төбәктең үҙенсәлектәре иҫәпкә алынған программалар булдырыу зарур.

4. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинеттарының матди базаһы йомшаҡ булыуы ла ҡамасаулай.

5. Дәреслектәр менән тәьмин итеү ҙә тулыһынса түгел (әлегә дәреслектәр менән тәьмин ителеш 70% тәшкил итә).

6. Беҙҙең район мәктәбен тамамлаусыларға юғары уҡыу йорттарына инеү өсөн махсус льготалар күберәк булһын ине.

Беҙ үҙ телебеҙҙе яратабыҙ, ихтирам итәбеҙ. Башҡортостандан ситтә йәшәһәк тә, уның тарихы, әҙәбиәте, мәҙәниәте менән танышабыҙ. Халыҡ шағиры Рәми ағай Ғарипов әйткәнсә, илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ.